Башҡортостан Республикаһы МР Бөрйән районы мәғариф бүлеге

*Кәрҙәштәрем, кешелектең сәңгелдәге бында – Бөрйәндә,*
*Урал илдән тарих башлана.*

# Урал



*Эпосы булған халыҡ - боронғо халыҡ.*
*Эпостар башҡорт халҡын Уралтауға*
*мәңгегә ҡаҙаҡлап ҡуйған.*

*Әхмәт Сөләймәнов*



## Хөрмәтле ҡунаҡтар!

Һеҙҙе “Урал батыр”, “Аҡбуҙат”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡара юрға”, “Бабсаҡ менән Күсәк” эпостарын тыуҙырған, батырҙарыбыҙҙың эҙҙәрен һаҡлаған изге Бөрйән ерендә күреүемә шатмын! Мәртәбәле конкурстың үҙ ерлегенә- Бөрйән районына ҡайтып, икенсе йыл рәттән беҙҙең төбәктә үткәрелеүе шатлыҡ һәм ғорурлыҡ тойғолары уята.

“Урал батыр” эпосы - башҡорт халҡының донъяуи белем, киң фәлсәфә, аҡыл һәм тәрбиә туплаған үҙенсәлекле хазинаһы. Йәш сәсәндәр бәйгеһендә ҡатнашыусы балаларҙың зиһененә, хәтеренә, кеше аҡылының ҡөҙрәтенә һоҡланмау мөмкин түгел. Уны яттан белеү Яҡшылыҡ, Берҙәмлек һәм Тәбиғәт идеологияһын нығытыуға, ышаныслы, ҡеүәтле киләсәк быуынды тәрбиәләүгә бәйле. Был конкурс эпосты йылдан-йыл яңынан асыу, кешелек булмышын тәрәнерәк аңлау, мәңгелек һорауҙарға яуап алыу маҡсатында үткәрелә.

Ҡәҙерле йәш сәсәндәр! Был сәмле ярышта ҡатнашыуығыҙ һеҙгә икеләтә яуаплылыҡ өҫтәй: беренсенән, алдығыҙҙа башҡорт халҡының милли йолаларын киләсәк быуынға түкмәй-сәсмәй еткереү бурысы торһа, икенсенән, сәсәнлек оҫталығығыҙҙы күрһәтеү - булмышығыҙҙы асып һалаһаҡ. Конкурс иң-индәрҙе асыҡлап, еңеүселәр ҙә, еңелеүселәр ҙә булып, әммә күңелдәрегеҙ төшмәһен. Республика йәш сәсәндәр конкурсында ҡатнашыу хоҡуғы алғанһығыҙ икән, һеҙ бөгөндән еңеүсе, һеҙҙең һәләтегеҙ, тырышлығығыҙ оло баһаға лайыҡ. Барығыҙға ла һуңмаҫ дәрт, ярыш сәме, илһам, ижад ҡомары, еңеү оҫкондарының яҡтын булып дөрләп яныуын теләйем! Хоҙай һеҙгә тел аҫкыстары бирһен, ятлағаныгыҙ хәтерегеҙҙә килеп торһон! Сал тарихлы эпостар, легенда-йолалар төйәге булған бәрәкәтле Бөрйән еренән шиңмәҫ көс, дәрт, рух күтәренкелеге алып ҡайтыуығыҙҙы теләйем!

Уңыштар юлдаш булһын һеҙгә!

Р. Б. Шәрипов,

район мәғариф бүлеге етәксеһе

Ҡобайырҙы яҙып алғанда, М. Буранғолов уның тел үҙенсәлектәрен мөмкин тиклем һаҡларға тырышҡан. Әлеге көндә ҡулъяҙманың төп нөсхәһе һаҡланмаған, ә латин телендә машинкала баҫылған текст Рәсәй Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының ғилми архивында һаҡлана. 1941 йылда М. Буранғолов ҡобайырҙарҙы баҫып сығарыу өсөн әҙерләй, тик ул ни сәбәптәндер донъя күрмәй ҡала.



URAL BATЬR

(эпос)

1910 jыl Orenburg gubernahы, Orenburg ejәdә Etqol volьsы Irdәs avыlыnda Qobit qarajыь menәn Bolәkoj Etqol avыlыnda Xamit qarajыlar hөjlәvenәn jadыp alыnыp, Mөxәmәtşa Buranqol tarafыnan sistәm alaştarыlqan.

Boron- boron borondan,
Keşe- [illegible] bulmaqan,
[illegible] ajaq basmaqan,
U tirәlә qoro jer
Barlыqыn his keш belmәgәn,
Dyrt jaqыn diŋgeð uratqan,
Bulqan ti ber urыn,
Anda sыqan ti boron,
Jan/birdә tigәn qart man
Janbikә tigәn ber qarsыq;
Qajda barыp ulara
U urыnda jal asыq.
Bы qart man bы qarsыq
Qajdan munda kilevәn,
Ata, әsә, jer - hыvыn,
Qajda torop qalqanыn
Yððәre lә onotqan,
Ikәvðәn ikәv ðә jerðә
Baqыp qoðәr bergәndәr,
Tora-bara [illegible]
Ike ulы la baqandar.
Sylgәn baqan olcho,
Ural baqan kesche,
Bytәn keşe kyrmәjәe,
Tik jәşәgәn dyrtәvhe.

*Шүлгәнташ*

*Таш ҡыуышы ғына түгел,*
*Был – тәү кеше төйәге.*
*Шүлгәнташтың серенә әле*
*Инәһе лә инәһе.*
*Мәмерйәнең есемендә –*
*Таш быуаттар ҡиссаһы,*
*Исемендә – рисүәттәр,*
*Ҡобайырҙар китабы.*
*Бында башҡорт*
*башлангысы –*
*Милләт йәне Шүлгәндән.*
*Тәү әсәбеҙ, тәү бабабыҙ*
*Ошо ерҙә тирләнгән.*
*Ошо ерҙә төйәкләнгән*
*Йәнбикәбеҙ, Йәнбирҙе.*
*Мәмерйәбеҙ ишеткәндер*
*Тәүге телде, тәү көйҙө.*
*Бында Урал аманаты –*
*Тәүтормоштан ук өлгө:*
*Тереһыуҙар бөркөлгән ер*
*Ыһсын-ыһсындан изге.*
*Тәбиғәттең генә түгел,*
*Бында кеше мираҫы,*
*Уҙ аңыбыҙ йәншишмәһе,*
*Рухыбыҙ Аҡбуҙаты.*
*Ҡандар менән тирләнгән ер,*
*Түгел бары мәмерйә.*
*Йәнде һаҡлар өсөн беҙгә*
*Әрнергә лә әрнергә...*

*Таңһылыу Ҡарамышева*

## “Урал батыр”ҙың лайыҡлы варисҭары

“Урал батыр” эпосының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ: яҡшылыҡты яманлыҡтан айырыу, хеҙмәткә өйрәтеү, төрлө тыйыуҙар, ололарҙы ололау һәм кеселәргә оло булa белеү, тыуған төйәгеңде һаҡларға һәм яҡларға өйрәтеү, тәрбиә йолаһы ла, өгөт-нәсихәт тә -барыһы ла урын тапҡан унда.



Районның “Сәсәнлек мәктәбе”н үҫтереүгә күп көс һалған тәжрибәле етәксе, быйыл мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында ла район конкурсын ойоштороуҙа инициатор, мәғариф бүлеге методик кабинет мөдире Роза Шәриф ҡыҙы Ғүмәрованың фекерен белергә теләп бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.

**-Башҡорт халҡының рухи асылы булған "Урал батыр" эпосының тарихи ерлегенә ҡайтарырға тырышыуығыҙҙың төп маҡсатын һөйләп үтегеҙ әле.**

- Башҡортостаныбыҙ - боронғо тарихи ил. Ысынлап та, һәр төбәктең үҙ йөҙө бар: кемдәрҙер тула баҫыу, шәл бәйләү оҫталыҡтары менән дан тотһа, берәүҙәр йолаларҙы һаҡлауы менән ихтирамға лайыҡ, кемдәрҙер тәбиғәт ҡомартҡылары менән ғорурланһа, берәүҙәр йыр-моңға бай булыуҙары менән өҫтөнлөклө. Гүзәл Бөрйәнебеҙ иһә “һәр һуҡмағы, һәр ташы тарих һөйләүе” менән билдәлелек алған. Шуға ла бөйөк “Урал батыр” эпосы районыбыҙҙың брендына әүерелергә тейештер тип уйлайым.

**-Белебеүеҙҙә, эпосты ятҡа һөйләү тәү башлап ошо ерҙә башланғыс алған...**



-Эйе, тәүҙә мәктәптәр араһында ғына, һуңыраҡ күрше –тирә райондар йыйылып эпосты ятҡа һөйләү - беҙҙә башланғайны. 1998 йылда нигеҙ һалынған был ярыш, тора-бара бөтөн республика буйынса күсмә йүнәлеш алды ла китте. “Урал батыр” эпосын башҡарыусы балаларҙың тәүге республика конкурстарын ойоштороусылар, хәҙер инде беҙҙең арала булмаған Клара Байназарова, Марат Муллағолов, Латиф Ҡаһарманов һәм әлеге көндә лә был изге башланғысты дауам итеүсе Гәрәй Йомағоловтың эшмәкәрлеге ҙур баһаға лайыҡ. Районыбыҙҙың шәхси конкурсы булып үҙ урынын тапһын, ил гизеп йөрөргә йөрөргә тейеш түгел ул тип, мин шул осорҙағы район хакимиәте башлығы Динир Әсғәт улы Әхмәтйәновҡа хат аша мөрәжәғәт яҙҙым. Ул үҙ сиратында министрлыҡҡа тәҡдим яһаны. Тырышлығыбыҙ бушҡа китмәне: етәкселек беҙҙең үтенсебеҙгә йөҙ менән боролдо һәм Баймаҡ районындағы конкурстан һуң, артабанғы ун алтынсы республика йәш сәсәндәр фестиваленең үҙебеҙҙә үткәреләүенә һыңғай яуап алдыҡ. Эпостың тыуған еренә ҡайтыуына Бөрйән ҡыҙы Вәлиева Венера Фәрит ҡыҙы күп көс һалды. Мәғариф министры урынбаҫары вазифаһын атҡарыусы яҡташыбыҙ рухи яҡтан да, матди йәһәттән дә һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙа. Форсаттан файҙаланып, һәр саҡ ярҙам күрһәтергә әҙер торған Фәниә һәм Әнүәр Йәнбирҙиндарға ла ҙур рәхмәтебеҙҙе әйтке килә. Районыбыҙ халҡы исеменән эшендә ижади уңыштар юрап, изге теләктәребеҙҙе еткерәйек!

**- Мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында ла район конкурсының фәһемле башланғыс алыуына өмөт бармы?**



-Әлбиттә! Уҡыусылар мәктәп эскәмйәһендә белергә тейеш йөҙ аҫар исемлегендә мәшһүр “Урал батыр” эпосы ла бар. Балалар кесе йәштән үк эпостың йөкмәткеһен күңеленә һалып үҫергә тейеш. Ижади эш башҡарыу өсөн эпос йөкмәткеһенән бөтөн тор мәғлүмәттәрҙе лә табырға була: унда әхләки кодекс та, халыҡ аҡылы ла, философия ла, афоризм да- барыһы ла бар. Ошо хәҡиҡәтте аңлаған ата-әсәләр, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр кескәй сәсәндәребеҙ күңелендә эпосҡа ҡарата һөйөү уята аласаҡ. Бөтөн күңелдәре менән бирелеп “р” һыҙ булһа ла “Урал батыр” юлдарын тамашасыларға еткерергә тырышҡан бәләкәстәрҙе тулҡынланмай тыңлауы мөмкин түгел. Сәмле ярыш ярты көн дауамына һуҙылһа ла баһалауҙа ла, тамаша ҡылыуҙа ла ялҡманыҡ. Хатта регламент һаҡлау өсөн йәш сәсәндәрҙе бүлдереү, һуңынан урындар билдәләү- иң ауыр мәсьәләгә әүерелде. Әле йүнләп хәреф тә танымаған, үҙ аллы уҡый ҙа белмәгән өс-ете йәштәр арауығындағы балаға конкурс талабына ярашлы 50-200 юлды хәтеренә һеңдереү, образға инергә өйрәтеүҙең ни тиклем сабырлыҡ һәм оҫталыҡ талап иткәнен бәләкәсте ярышҡа әҙерләүсе остазы үҙе генә белә. Шуныһы ҡыуаныслы, конкурстан бер йәш сәсән дә, башҡаса ятламайым тип ҡайтып китмәне. Барыһы ла Маҡтау ҡағыҙҙары, ҡатнашыусы сертификаттары һәм дәртләндереү бүләктәре алып таралыштылы.

**-Меңдәрсә йыл элек ижад ителгән “Урал батыр” эпосындағы һабаҡтар менән егерме беренсе быуат балаларын тәрбиәләп буламы? Быйылғы конкурсты үткәреүҙә ниндәй яңылыҡтар көтөлә?**

-“Урал батыр” ҙа төп төшөнсәләр яҡшылыҡ, мәңгелек, тәбиғәтте һаҡлау, батырлыҡ идеялар булып өҫтөнлөк итеүе хаҡында әйтеп үткәйнек. Тап ошо сифаттар үҙ төсөн юғалта бара кешелә. Быйыл Ульяновскиҙа 35 региондан килгән балалар араһында ойошторолған “Йыл уҡыусыһы” Рәсәй конкурсында ҡатнаштыҡ. Йәш быуындың тарихты, асыҡлап әйткәндә, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарын, тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙы, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе, хатта космонавтарҙы өҫтөн-мөҫтөн генә белеүҙәре, ҡайһы бер мәғлүмәттәргә конкурсҡа кәрәклеге өсөн генә хәбәрҙар булыуҙары күңелде ҡырҙы. Илһөйәрлек түбән кимәлдә. Киләсәгебеҙ кем ҡулына ҡала? Ә бит һәләтле балаларыбыҙ бик күп. Дөрөҫ маҡсат ҡуйыу, талантты күрә, уята белеү генә кәрәк- шунда уҡ дөрөҫ тәрбиә йүнәлеш аласаҡ.

Башҡорт халҡы элек-электән кескенән бала зиһененен уятҡан, рухиәтен үҫтергән . Шунан сығып, быйыл “Урал батыр” ҙың программаһын да тәрбиәүи йүнәлештә төҙөнөк. Конкурстың төп этабы булған эпостан өҙөк һөйләү һәм сәхнәләштереүҙәрҙе тамаша ҡылғандан һуң, бәрәкәтле изге еребеҙ – Йылҡысыҡҡан күле буйында һабантуй үткәреү ҡаралған. Был сара сиктәрендә милли уйындар, йолалар, атап әйткәндә, ҡорбан ашын ейеү йолаһы үткәреләсәк. Бынан тыш Бөйөк Еңеүҙең еңел яуланмауын асып биреү маҡсатында парад ойоштороу, Әбделмәмбәт урта мәктәбе тарафынан әҙерләнгән “Ҡара икмәк” спектаклен күрһәтеү планлаштырылған. Сөнки хәҙерге йәш быуын ауыр һуғыш йылдарында халыҡтың аслы-туҡлы йәшәүен, бер телем икмәккә зар-интизар булыуҙарын күҙ алдына ла килтерә алмай. Уҡыусыларҙың: “Һуғыш йылдарында икмәк булмаҕас, бутербродты нисек эшләнегеҙ?”- тигән аптырауҙы һорауҙары ла ошоға асыҡ дәлил булып тора. Үткәреләсәк сараларыбыҙ конкурсанттарҙың күңеленә үтеп инер, илһөйәрлек тойғоларын үҫтерер һәм киләсәк быуынды тәрбиәләүгә этәргес көс булыр тип ышанабыҙ.

**-Киләсәккә хыялдарығыҙ? Тағы ниндәй яңылыҡтар , идеялар тормошҡа ашыу сиратын көтә?**

- Киләсәккә иң ҙур хыял:“Урал батыр эҙҙәренән” музейын булдырыу. Был идея район хакимиәте башлығы Рөстәм Динислам улы Шәрипов тарафынан да яҡлау тапты, әммә ҡыҫҡа ғына араўыҡта атҡарыла торған эш түгел. Әйтеп үтергә кәрәк, уның башланғысы бар: конкурс барышында күсмә музей менән таныштырығыҙ. Киләсәктә төрлө эҙләнеүҙәр үткәреү, экологик һәм тарихи һуҡмаҡ һалыу, фәнни-тикшеренеү эштәре алып барыу- планға индерелгән мөһим сараларҙан иҫәпләнә.

Әңгәмәнең һуңында мәшһүр рухи ҡомартҡыбыҙҙың атайсалында яңы һулыш алыуына булышлыҡ иткән райондаштарыбыҙға, бағымсылыҡ ярҙамы









*Халыҡ ижадының асыл комартҡыһын*

*Һин халыҡҡа ҡабат ҡайтарҙың...*

## “Урал батыр” эпосын халыҡҡа еткереүселәр тураһында тарихи мәғлүмәттәр.

1910 йылдың йәмле йәй айҙарында, "Хөсәйениә" мәҙрәсәһендә уҡып йөрөгән 22 йәшлек шәкерт Мөхәммәтша Буранғолов, халыҡтан ауыҙ-тел ижадын йыйыу, уларҙы яҙып алыу маҡсаты менән, Бөрйәнйырыуы яҡтарына килә. Үл Түбәнге Иҙрис ауылында йәшәүсе Ғәбит сәсән Арғынбаев менән осрашып унан бик күп ҡобайыр һәм бәйеттәр яҙып ала. Ғәбит сәсән Хәмит сәсәндән 5 йәшкә оло була. Шулай ҙа, унан Мөхәмәтша Буранғолов "Урал батыр" эпосын һөйләүен һорағас:

- Хәмит ҡайнағамдан үтеп, халҡыбыҙҙың изге ҡомартҡыһын үҙем генә һөйләй алмайым, - тип яуап бирә. Сөнки Ғәбиттең ҡатыны Хәмит сәсәндең бер туған ҡарындашы була. Бер нисә көндән Ғәбит сәсән атын егеп, Мөхәмәтшаны алтыртып 2-се Әтҡол ауылына юлланалар. Хәмит сәсән Мөхәмәтшаның изге ниәтен белгәс, алыҫ сәфәрҙән яңы ғына ҡайтып торуына ҡарамаҫтан, ҡорбан салырға ҡарар итә. Абдулов тигән ауылдашынан ҡорбанлыҡ һарыҡ һатып ала.

Ауылдан алыҫ түгел Бишҡайын һаҙлығы буйына сығып, сәсәндәр ҡорбан салып ҡаҙан аҫалар. Изге доғалар уҡып, ҡорбан ашынан ауыҙ иткәс, улар М.Буранғоловҡа халыҡ ҡомартҡыһы "Урал батыр" ҡобайырын алмашлап ятҡан һөйләргә тотоналар. Сәсәндәр ҡобайырҙы сәғәттәр буйы бер туктамай ятҡан һөйләйҙәр. Шулай итеп, быуаттар буйы телдән-телгә күсеп килгән башҡорт халҡының изге ҡомартҡыһы "Урал батыр", ошо ерҙә тәүге тапҡыр ғәрәп хәрефтәре менән аҡ ҡағыҙға яҙыла.

Был ваҡытта Бишҡайын һаҙлығынан алыҫ түгел, Байым талы һәм Сарҙаҡ күле буйында, ауыл халҡы Әхмәров Әхмәткәрим байға бесән сабып ятҡан була. Улар байҙың рөхсәте менән Мөхәммәтша Буранғоловты күрергә киләләр. Бишҡайын һаҙлығы буйында оло йыйын барлыҡҡа килә. М. Буранғолов халыҡ менән иркенләп һөйләшә, аралаша, һуңынан был урынға иҫтәлек итеп ике метр бейеклегендәге таш ултыртыла.

Йылдар үтеү менән Бишҡайын һаҙлығына ултыртылған таш юҡолай. 2006 йылда, Хәмит сәсәндең ейәнсәре Сәлимә апай һәм ошо ауылдың тарихсыһы Мораҙым Ишбулды улы Хәлиловтарҙың инициативаһы менән, таш Сибай ҡалаһында стелла итеп эшкәртелеп, шул уҡ урынға яңынан ҡуйыла. Ошо урында сәсәндең нәҫеле йыйылып шәжәрә байрамы үткәрәләр. Стеланы асыу тантанаһы ойошторола һәм "Урал батыр" эпосының ҡағыҙға төшөүенә 96 йыл тулыуҙы билдәләйҙәр.

Һуҙ сәнғәтенең иң боронғо үрнәге булған "Урал батыр" хәҙер төрөк, инглиз, француз, рус, чех, сыуаш һәм башҡа телдәргә тәржемә ителгән.

(Тарихи мәғлүмәттәр 2013 йылда Баймаҡ ерендә республика йәш сәсәндәр конкурсы үткәрелеү айҡанлы әҙерләнгән “Телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ” йыйынтығынан алынды).

## Халыҡ фекере

**“Урал батыр” эпосы – тәрбиә сығанағы**

“Урал батыр” эпосы – ул беҙҙең рухи йәшәйешебеҙ хаҡында үлемһеҙ әҫәр. Әҙәбиәтҡә генә түгел, ә тотош халыҡҡа, башҡорт милләтенә илаһи ҡот, мәңге һүнмәй торған йәшәү сығанағы, мәҙәнилек бирә ул...

Урал батыр” эпосын ятҡан һөйләү буйынса үткәрелгән республика сәсәндәр бәйгеһенең тыуған ерлегенә әйләнеп ҡайтыуына ҡарашы нисек, ғөмүмән, эпосты ятлауға ҡарата фекерҙәре менән уртаҡлашыуҙарын теләп районыбыҙ халҡына һүҙ бирәйек:

**Гөлшәһиҙә инәй (56 йәштә, пенсионер):**

-Районыбыҙ төрлө мәҙәни саралар үткәреү йәһәтенән республикала билдәлелек яулаған. Иншалла, был байрамды ла имен-һау үткәреп ебәрерҙәр.

**Сәғит (йәшен әйтмәне, эшсе):**

-Яҡшы яңылыҡ тип ҡабул итәм. Ул сама кешене ҡунаҡ итергә лә көс кәрәк бит, былтыр үҙәктә урам тулып йөрөгән мәктәп автобустарын иҫләйем.Хәтерегеҙ үҫешә тип мәктәптә шиғырҙы күп ятлата инеләр. Ятлаһындар әйҙә, һуңынан башҡалара ла һөйләрҙәр...

**Айһылыу (30 йәштә, һатыусы):**

-Беҙҙең Бөрйәнебеҙ легендалар төйәге икәнен беләбеҙ. “Урал батыр”ҙың ошонда барлыҡҡа килеүенә шатланырға тейешбеҙ тип уйлайым.

Дауамы 4 биттә

*Халыҡ фекере дауамы*

Быйыл минең 5 йәшлек ҡыҙым да мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында үткәрелгән район конкурсында “Урал батыр”ҙың 100 -гә яҡын юлын ятланы, маҡтау ҡағыҙы алдыҡ.Былай еңел ятланы, үҙ көйөнә булһа ла йырлап та ебәргән була.

**Айсыуаҡ (15 йәштә, колледж уҡыусыһы):**

-Бөрйәндә шундай байрамдар үткәрелеүенә шатмын. Мәктәптә уҡыған саҡта конкурсҡа килгәндәрҙең беҙҙең тәбиғәткә хайран ҡалыуҙарына үҙем аптырашта ҡала инем. Ҡырға сығып киткәс тыуған төйәгебеҙҙең гүзәллегенә тағы ла бер инандым.

**Хәйбуллина Алһыу (Иҫке Собханғол урта мәктәбе уҡыусыһы, 2014 йылда “Урал батыр” республика конкурсы еңеүсеһе):**

-2014 йылда эпосты яттан һөйләп, 1-се урын алдым. Беҙҙең районда үткәрелеүе бик яҡшы, тип уйлайым, сөнки башҡа яҡтан килгәндәр эпоста һүрәтләнгән урындар менән танышып ҡайта ала. Был конкурс бик әһәмиәтле, эпосты һәр кем белергә тейеш.

**Вилена (6 йәш, балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе):**

-Быйыл мин ҙур клубта “Урал батыр”ҙы һөйләнем. Мәктәпкә барғас та ятлаясаҡмын, урындар аласаҡмын. Мин доғалар ҙа ятлайым. “Урал батыр”ҙы ҙур әкиәт тип уйлайым. Баҡсала ла, өйҙә лә уҡыныла



*Ҡаурый ҡәләм тибрәй ҡулымда,*
*Ил ғәмдәре иңрәй уйымда!*

# Уҡыусылар ижады

## Урал варисҭары

Еренә аяҡ баҫыу менән, үҙенән –үҙе моң сығырға торған гүзәл тыуған төйәгебеҙҙә ижади һәләткә эйә балаларҙың күплеге берәүҙе лә аптыратмаҫ. Урал батыр варисҭарынының ижади эштәренән эпостың үҙе хаҡында, йәшәү рәүеше, тормош хаҡында уйланыуҙарынан үрнәктәр тәҡдим итәбеҙ.

Урал Батыр ере – минең ерем (ижади эштән өҙөк)

- Тау-урмандар йәшәрһен,

Мәңге үлмәҫ төҫ алһын…

Эйе, Урал батыр ҡоролоҡтан һәләкәт сигенә еткән ерҙе тереклек һыуы һибеп ҡотҡарып ҡала. Бер үк ваҡытта ул, үҙ-үҙен, ер-һыу, ундағы халыҡ ғүмере хаҡына, ҡорбан итеп, батыр исемен дә үлемһеҙ яһай, йәғни үлемһеҙ икәнлеген раҫлай.

Урал – ул беҙҙең ергә яралған, тыуған ил төшөнсәһен башлаусы изге төйәгебеҙ. Халҡы өсөн Урал йәшәйеш, тәбиғәт ҡалдырған.

…Тыуған еркәйем! Һин минең йөрәгемә, күңелемә ошо ер -һыуҙарың, зәңгәр күгең, ал, сағыу ҡояшың, бейек тау һәм ҡош-ҡортҡа бай урмандарың, сәскәле ҡырҙарың, төрлө ҡош-ҡорттарың, кейектәрең менән урынлаштың.

Тыуған еремдең мәңге йәшел, үлмәҫ тәбиғәтен Урал батыр ҡалдырған. Мәғрүр Урал буйҙарында бик боронғо замандарҙан алып башҡорт халҡы йәшәгән. Ошо тауҙарға һоҡланып, ғорурланып, ул «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпостарын, бик күп йырҙар, әкиәттәр ижад иткән. Урал батыр исеме үлемһеҙ. Ул яуыз дейеүҙәрҙе, аждаһа-йыландарҙы ҡыйратып ташлай, кешеләрҙе топҡонлоҡтан ҡотҡара. Йәншишмә һыуын урлаған батыр,үҙ ғүмерен аямай, уны бөтә тирә-яҡҡа бөркә, тәбиғәттең мәңге тере булыуын теләй. Бына нимә ти ул: «Мин - бер кеше, һеҙ – күп кеше, мин түгел, ә ер-һыу үлемһеҙ булһын, ерҙә кешеләр шат, рәхәт йәшәһен».

Батыр үҙе үлә, әммә тәбиғәт мәңге тере ҡала...

Батырҙарға йәшәргә көс, дәрт биргән Уралдың шифалы, хуш еҫле һауаһы хәҙер кешеләргә дарман бирә. Урал итәгендә күңелдәрҙе иретерлек моңло ҡурай тауышы яңғырай. Башҡорттоң данлап йырлаған матур тәбиғәтле Уралын, гүзәл Ағиҙелен, ҡалын урмандарын беҙ һаҡлау, яҡлау өҫтөндәбеҙ.

Һине алда нимә көтә, ерем? Сал быуаттар аша беҙгә килеп еткән мираҫ байлыҡ – үҙ ҡулыбыҙҙа. Эйе, барыһы ла үҙ ҡулыбыҙҙа тора.

Бөгөнгө көнөбөҙ ҡатмарлы булһа ла, тыуған еремдең, милләтемдең киләсәге өмөтлө булыр, халҡымдың рухы, теле мәңге йәшәр, тыуған яғым күкрәп сәскә атыр, тип ышанам.

Урал рухы йәшәһә, беҙ ҙә йәшәрбеҙ! Урал булғанда – башҡорт та булыр! Үҙебеҙ йәшәгән ер-һыуҙы яратайыҡ, уны ҡәҙерләп һаҡлайыҡ. Беҙҙе туйындырған, үҙенә һыйындырған тыуған еремдең, ер-һыуының биргән байлығын, изгелеген онотмайыҡ, йәмен юғалтмайыҡ!

Айгүзәл Ҡаһарманова,

Иҫке Собханғол урта мәктәбенең Яңы Собханғол филиалы, 7-се класс уҡыусыһы

## *Тормош диңгеҙе (шиғыр)*

*Тормош тигән оло диңгеҙҙең*
*Тулҡындары ярға ҡаҡҡанда,*
*Ҡаршылыҡҡа табан юл ярмайса,*
*Аҙымдарҙан ҡурҡып ҡалғанда,*

*Аңламаҫның, бөтә беҙҙең ғүмер*
*Йәшәү өсөн көрәш икәнен.*
*Ауырлыҡтан ҡурҡып ярҙа торһаң,*
*Бәхет даръяһында йөҙмәҫһең.*

*Туҡтамайса, көслө ағымдарға*
*Бирешмәйсә, ынтыл тик алға.*
*Ярҙамдарға мохтаж саҡтарҙа*
*Яҡын дуҫтар булһын янында.*

*Оло тормош – тәрән диңгеҙҙәр ул,*
*Кемдер йөҙөп сыға, кем бата.*
*Кемдер бәреү тамсыларҙан ҡурҡып,*
*Ҡарап ҡына ҡала ярында.*

*Лилиә Ҡаһарманова,*

*Байназар мәктәбенең 11-се синыф уҡыусыһы*

Махсус номерҙағы материалдарҙы:

Г. Д. Мөхәмәдйәрова,

Ә.И. Ибраһимова,

А. Ә. Хисаметдинова,

Ф. Ф. Кинйәбулатова әҙерләне.

Фото:

Бускунов Зиннур